Башҡортостан Республикаһының мәғариф министрлығы

Дәүләт бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты

«Ҡаралған»	«Килешелгән»	«Раҫлайым»
Башҡорт теле һәм әҙәбиәте	Уҡыу-уҡытыу буйынса	Рәми Ғарипов исемендәге
уҡытыусыларының МБ ултырышында	директор урынбаҫары	1-се БРГИ директоры
«26» август 2021 йыл	«27» август 2021 йыл	«28» сентябрь 2021 йыл
---------- А.Х.Кайбышева	---------- Л. Х. Шөғәйепова	----------И.Р.Сәлихов

Календарь-тематик планлаштырыу

Уҡыу предметы Туған тел(башҡорт)

Класс 8

Сәғәттәр һаны аҙнаһына 2 сәғәт, бөтәһе 70 сәғәт

Программа нигеҙләнде 2010 йылдың 17 декабрендә РФ Мәғариф һәм фән министрлығының № 1897 һанлы приказы менән раҫланған Федераль дәүләт стандарттары нигеҙендә төҙөлдө; уҡытыу туған телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11-се кластары өсөн “Башҡорт теле” предметы буйынса белем биреү программалары. Авторы З.М. Ғәбитова. Өфө: Китап, 2017; Р. Ғарипов исемендәге 1-се БРГИ локаль акттары; 2021 йылдың 26 августындағы башҡорт теле уҡытыусылары кәңәшмәһендә раҫланған №1 һанлы протокол нигеҙендә.

Үтәлеү ваҡыты 2021-2022 уҡыу йылы

Ҡулланма Туған тел. 8-се класс. Л.Х.Сәмситова, С. А. Таһирова, Э.Ф.Рәхимова, Т.М.Исламова, Өфө, «Китап», 2017

Эш программаһын төҙөнө Л.И. Әминева

I. Аңлатма яҙыу

Башҡорт теленең – башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала. Туған телдең метапредмет белем биреү функцияһы мәктәптә белем алыу процесында бала шәхесен формалаштырыуҙа «Башҡорт теле» предметының универсаль, дөйөмләштереү характерын билдәләй. Башҡорт теле баланың фекер үҫешенә булышлыҡ итә; белем һәм күнекмәләрҙе үҙ аллы үҙләштереү һәләттәрен үҫтерә, шулай уҡ уҡыусыларҙың үҫтереүсе уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора. Туған тел башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеүгә нигеҙ булып тора һәм башҡорт әҙәбиәтенең рухи тел байлығын үҫтереүгә булышлыҡ итә; уҡыусыларҙы кешелектең мәҙәни тарихи тәжрибәһенә ылыҡтыра. Киләсәктә төрлө белемде үҙләштереү һәм һаҡлау формаһы булараҡ, башҡорт теле бөтә предметтар менән тығыҙ бәйләнештә тора һәм профессиональ күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай. Аралаша белеү, шул һөҙөмтәлә уңыштарға өлгәшеү, юғары профессиональ һәм социаль әүҙемлек шәхес тормошоноң төрлө өлкәләрендә өлгәшелгән уңыштарын билдәләүсе характеристикаһы булып тора. Туған тел баланың төрлө тормош ситуацияларында тәрбиә-этик нормаларын формалаштырыу нигеҙе; үҙ ҡылыҡтарына дәллиле баһа биреү мөмкинлеген үҫтерә.

Башҡорт телен уҡытыу маҡсаттары:

1. Туған телгә ҡарата һөйөү, мәҙәниәт күренеше булараҡ, уға ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү, туған телдең төп аралашыу, кеше эшмәкәрлегенең төрлө сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, йәмғиәттә ҡабул ителгән әхлаҡ-этик нормаларҙы үҙләштереү сараһы булыуын аңлау, туған телдең эстетик ҡиммәттәрен үҙләштереү;
2. Көндәлек тормошта һәм уҡыу эшмәкәрлегендә туған телде аралашыу сараһы булараҡ үҙләштереү; үҙ-ара аңлашыу һәм үҙ-ара фекер алышыуға һәләтлелекте үҫтереү; үҙ телмәреңде камиллаштырыу; мөһим төп уҡыу һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәре (эшмәкәрлектең маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән һәм сығанаҡтарҙан киң мәғлүмәт саралары һәм Интернеттан тейешле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү һ.б.)
3. Тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү, стилистик ресурстарҙы һәм төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, классификациялау һәм тел фактларын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын, актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; телмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү; белемде, күнекмәне аралашыу процесында уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

II. Уҡыу предметына дөйөм характеристика

Коммуникатив компетенция телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

Тел һәм лингвистик компетенция йәмғиәт күренеше булараҡ, тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренешен һәм фактҡарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

Мәҙәни компетенция туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли-мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикеи нормаларын үҙләштереүҙе, халыҡ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

Башҡорт теле курсының коммуникатив-эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәлтеү кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәләтле һәм унда әүҙем эшмәкәрлекте дауам итергә һәләтле булараҡ, функциональ грамоталылыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

Функциональ грамоталыҡтың мөһим индикаторы – предмет-ара статус: коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге (телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү, тиңдәштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу; телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү; ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк һәм тасуири әйтеп биреү, аралашыу процесында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетән һаҡлау); танып белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге (проблеманы аныҡлау, дөрөҫ аргументлай белеү, логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлау табыу, раҫлаусы йәки кире ҡағыусы тезис килтереү; библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәттәрҙе алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү, уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып уҡыу төрөн һайлау; мәғлүмәти-компьютер сараларын ҡулланыу; мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү һәм уны төрлө ысулдар менән күрһәтеү һ.б.); регулятив универсаль уҡыу хәрәкәте (эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм аныҡ итеп әйтә белеү, эшмәкәрлекте эҙмә-эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү; үҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ коррекциялау һ.б. тормошҡа ашырыу). Функциональ грамоталыҡтың мөһим компоненты телмәр эшмәкәрлеге төрҙәренә нигеҙләнә һәм мәктәптә туған телде өйрәнеү аша уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен маҡсатлы йүнәлештә үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

Функциональ грамоталыҡты формалаштырыу, уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыу башҡорт теленең төҙөлөшө һәм аралашыуҙың төрлө шарттарында уны ҡулланыу үҙенсәлектәренән белеү нигеҙендә төҙөлә. Уҡыу процесы телде анализлау күнекмәләрен формалаштырыуға ғына йүнәлдерелгән булырға тейеш түгел, ә шулай уҡ телмәр мәҙәниәтен тәрбиәләү, тормошта мөһим күнекмәләрҙе

формалаштырыу, төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу, тексты мәғлүмәти эшкәртеү, мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү, телмәр ситуацияһына, әҙәби тел нормаларына һәм аралашыуҙың этик нормаларына яраҡлы төрлө ысулдарын файҙаланыу. Шулай итеп, төп дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтерергә, артабан уҡыуын төрлө белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.

III. Башҡорт теленең уҡыу планындағы урыны

Башҡортостан Республикаһының башҡорт телендә уҡытылған дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн йыллыҡ уҡыу планы башҡорт телен 420 сәғәт күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота: 5-се класс – 105, 6-сы класс – 105, 7-се класс – 70, 8-се класс – 70, 9-сы класс – 70 сәғәт.

IV. Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре. «Башҡорт теле» предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре

Төп мәктәп сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теленән программаһы үҙләштереүҙең шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1. башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
2. башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; телмәрҙе үҙ камиллаштырыуға ынтылыу;
3. аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре булып:

1) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:
аудирование һәм уҡыу:
- телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; ттөп һәм өҫтәлмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
- төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү), төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙы ишетеп, адекват ҡабул итеү, төрлө төрҙәге аудирование менән эш итеү;

- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;
- һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;
- стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

Һөйләү һәм яҙыу:

- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;
- тыңлаған йәки уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;
- төрлө стилдә һәм жанрҙа, адресланыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;
- телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
- төрлө төрҙәге монологты (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү, төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалог (этикеты һүҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ.б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүен) үҙләштереү;
- ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
- телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;
- уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контолдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
- үҙ тиңдәштәреңдең аудиторияһында зур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;

2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа фәндәрҙә белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һ.б. дәрестәрҙә) ҡулланыу;

3) аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән комуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, көнүҙәк күтәрелгән темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

<u>Предмет һөҙөмтәләре:</u>

1) телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәттең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
2) гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;
3) туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү, уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен булдырыу;
4) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле; функциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст, текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;
5) башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
6) телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;
7) һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;
8) тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙы үҙ телмәреңдә ҡулланыу;
9) туған телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

Уҡыу предметының йөкмәткеһе

Телмәр үҫтереү (20 сәғәт)

Класташтырыңдың телмәрендәге интонацион, дөрөҫ әйтелеш, лексик һәм грамматик хаталарҙы тотоп ала һәм төҙәтә белеү. Күмәкләп спектакль ҡарау һәм һуңынан уйын тураһында ғына түгел, ә артистарҙың телмәр яңғырашы тураһында ла әңгәмә үткәреү, баһа биреү. Радио һәм телевидение дикторҙарының тауыштарын махсус тыңлау. Ролле уйындарҙа ҡатнашыу, уҡыусыларҙың үҙҙәренең телмәрҙәрен таҫмаға яҙып тыңлау, хаталарын барлау һәм төҙәтеү.

Тексты аңлау һәм аңлағанды һөйләү

Күркәм, эш ҡағыҙҙары, публицистик, фәнни, фәнни-популяр стилдәрҙәге текстарҙы уҡыу күнекмәләрен камиллаштырыу. Публицистик, фәнни һәм фәнни-популяр стилдәрҙәге текстарҙың күләмен ҙурайтыу. Күҙ йүгертеп уҡыу менән танышыу һәм ул төр уҡыуға күнектереү. Етеҙ уҡыу элементтары менән танышыу. Тасуири

уҡыу күнекмәләрен камиллаштырыу. Уҡыу техникаһын камиллаштырыу. Тын алышты тәртипкә килтереү. Тауышты дөрөҫ ҡуйыу: тауыштың көсөн, юғарылығын, темпын, биҙәген (тембрын) үҙгәртә белеү һәм һәм шул юл менән тауыш яңғырашының матурлығына, аһәңлегенә ирешеү.

Уҡыуҙың орфоэпик дөрөҫлөгөн, әйтелештең таҙалығын булдырыу. Тексты логик яҡтан дөрөҫ уҡыу белеү логик баҫымды, темпты, логик көйҙө дөрөҫ ҡуйыу зарур. Уҡыуҙың хис-тойғо биҙәген һынлы итеп сағылдыра алыу.

Һөйләү һәм яҙыу. Текст һәм уны анализлау

Текстың ниәте, темаһы, проблемаһы. Текстағы беренсе һәм икенсе дәрәжәләге информация. Текстың тел, ысынбарлыҡ һәм концептуаль информацияһы (һүҙҙәрҙең һәм грамматик формаларҙың мәғәнәһе, сағылдырылған хәл-ваҡиға, тексиың асылы, уның идеяһы). Тексты төҙөлөшө һәм логик йөкмәткегә яғынан киҫәктәргә бүлеү. Тексты ҡатмарлы синтаксик бөтөнгә, абзацҡа бүлеү. Текстың микротемаһын билдәләү. Текстың инешен, төп өлөшөн һәм һығымтаһын билдәләй белеү. Төрлө тип һәм жанрҙағы текстарҙың (хикәйә, хат,баһалама, рецензия, газета мәҡәләһе) композицион төҙөлөшө. Төрлө стилдәге текстарҙың үҙенсәлектәре. Күркәм әҙәбиәт, публицистик, фәнни, эш ҡағыҙҙары, йәнле һөйләү стилдәрен билдәләүсе лексик-грамматик саралар. Бәйләнешле тексы төҙөүҙең лексик, лексик-грамматик, грамматик сараларын табыу күнекмәһе. Тексты композицияһы һәм теле яғынан, мәғәнәһе, коммуникатив йәһәтенән анализлау. Текстың цитаталарҙан торған, ҡатмарлы һәм ябай планын төҙөү. Тексты үҙгәртеү: заманын алмаштырыу, йөкмәткеһен тарайтыу һәм киңәйтеү, тексты башҡа зат исеменән һөйләтеү. Телмәрҙе уның ниәтенә, темаһына, төп фекеренә, стиленә, тибына, жанрына тап килтереп камиллаштыра белеү. Конспекттар, тезистар мәҡәләләрҙең аннотацияларын төҙөү. Фәнни-популяр темаға, ике-өс сығанаҡтан файҙаланып, реферат яҙыу. Текст төҙөү. Төрлө типтағы һәм жанрҙағы текстарҙың төп фекерен айырым-асыҡ күрһәтеп, йөкмәткеһен тарайтып һөйләү. Уҡылған китаптарҙың, фльмдарҙың, спектакль, телевидение программаларының йөкмәткеләрен тарайтып һөйләү. Хикәйәләүгә ҡоролған текстарҙы, персонаждарына характеристика биреп, ентекләп һөйләү. Портретты тасуирлаған текст буйынса изложение яҙыу. Әҙәби геройҙы һүрәтләгән тексты изложение яҙыу. Ирекле диктант яҙыу. Ваҡиғаларҙың оҡшашлығына ҡоролған текстар буйынса диктант.

Текст төҙөү

Ғаиләлә, көнкүрештә, уҡыуҙа һәм хеҙмәттә, күмәк мәҙәни, спорт сараларында, уҡыуҙа һәм фәнни, ижтимағи-сәйәси мөхиттә, башҡа төрлө эшмәкәрлек шарттарында аралаша белеү. Тағы түбәндәге тип ҡорҙарҙа аралашыу: мин һәм әңгәмәсе (иптәш, уҡытыусы, таныш булмаған кеше); мин һәм кешеләр төркөмө: синыф, уҡыусылар төркөмө, йыйылыш, тамашасылар; мин һәм ташҡа баҫылған текст: газета, журнал, китап; мин һәм тауышлы текст: фонограмма; мин һәм күмәк информация саралары: радио, телевидение; мин һәм сәнғәт әҫәрҙәре: картина, спектакль, кинофильм. Бөтөн бер аралашыу тексын төҙөгәндә композицион һәм логик сараларҙы файҙалана белеү.

Аралашыу проблемалары, темалары, ситуациялары

1. Телдәр һәм халыҡтар. Ҙур һанлы һәм әҙ һанлы халыҡтар, уларҙың телдәре. Киң һәм әҙ таралған телдәр.

2. Телмәр культураһы – тәртип культураһы. Дөрөҫ телмәрҙең сафлығы.
3. Һүҙҙәрҙең һәм әйтемдәрҙең тормошонан. Ҡанатлы һүҙҙәр һәм әйтемдәр. Һүҙҙәрҙең килеп сығышы.
4. Музыка. Халыҡ музыка ҡоралдары.
5. Сәнғәт төрҙәре. Опера һәм балет. Данлыҡлы артистар.
6. Һүрәт сәнғәте, уның төрҙәре (рәсем, графика, скульптура). Музейҙарға экскурсиялар. Башҡортостанда һүрәт сәнғәте. Өфөнөң, башҡа ҡалаларҙың скульптура һәйкәлдәре.
7. Бөйөк Ватан һуғышында республикабыҙ халҡының ҡаһарманлығы.
8. Тыуған Башҡортостан киңлектәре.
9. Кеше һәм тәбиғәт. Экология проблемалары.
10. Башҡорт яҙыусылары. Башҡортостанда рус яҙыусылары.
11. Минең яратҡан китабым. Мин яратҡан яҙыусы.
12. Фән һәм техника. Фән кешегә хеҙмәт итә. Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең ғалимдары. Мөһим фәнни асыштар.
13. Уҡыу – беҙҙең төп хеҙмәтебеҙ. Фәнни түңәрәктә.
14. Һөнәрҙәр. Бөтә һәнәр ҙә яҡшы – оҡшағанын һайла.
15. Башҡортостандың ауыл хужалығы. Икмәк – беҙҙең байлығыбыҙ. Башҡортостандың сәнәғәте.
16. Күмәк информация саралары. Беҙҙең тормошта – газета, журнал, радио, телевидение.
17. «Йәшлек» проблемалар ҡуя.
18. Кеше. Үҙебеҙ тураһында ни беләбеҙ? Кешенең мөмкинлеге.

Телмәр төрҙәре

Ҡаралған кинофильмдың, спектаклдең йөкмәткеһен һәм төп фекерен үҙ аллы асыу өсөн ҡуйылған һорауҙарға киңәйтелгән яуап бирең. Экология проблемалары, йәштәр, ижтимағи һәм әхлаҡи проблемалар буйынса бәхәстәрҙә ҡатнашыу. Үҙеңдең фекереңде, ҡарашыңды дәллиләп иҫбатлай белеү. Әңгәмәсегә үҙ фекереңде, арашыңды аңлата, ышандыра белеү.

Китап уҡыусылар конференцияһында диспутта ҡатнашыу. Доклад менән сығыш яһау. Тел белеме хаҡында докдад һөйләү. Китап тураһында, спектакль буйынса баһалама яҙыу йәки мәҡәләгә, спектаклгә, фильмға, телевидение программаһына рецензия яҙыу. Музейҙың, картиналар күргәҙмәһенең тәҡдимдәр кенәгәһенә баһалама яҙыу. Башҡорт телендәге фәнни-популяр әҙәбиәткә күҙәтеү яһау. Яҡын таныштарына, әҙәби геройҙарға характеристика төҙөү. Күмәк портрет. Ил, республика буйлап сәйәхәттән алған тәьҫораттар тураһында һөйләү һәм яҙыу. Күренекле ғалимдар, яҙыусылар, рәссамдар, композиторҙар тураһында яҙыу һәм һөйләү. Тарих дәреслектәрен, күркәм әҫәрҙәрҙе файҙаланып, тарихи ваҡиғалар тураһында һөйләү. Синыф йыйылышында, яҙыусылар, рәссамдар, композиторҙар менән осрашыуҙарҙа сығыш яһау. Уҡылған әҫәрҙәр, ҡаралған кинолар, спектаклдәр буйынса ундағы геройҙарға ҡарата үҙ фекереңде сағылдырып, иншалар яҙыу. Тасуирлау, фекер йөрөтөү элементтары индереп, хикәйәләүгә ҡоролған инша яҙыу. Пейзажды һәм кешенең кәйефен тасуирлап инша яҙыу.

Ике һәм унан да артыҡ картналар буйынса, сағыштырыуҙар индереп, инша яҙыу. Газетаға дискуссия характерында мәҡәлә яҙыу. Рус телендәге күркәм әҫәр һәм публицистика өҙөктәрен тәржемә итеү.

Тел белеме, телмәр күнекмәләре

8-се класс уҡыусылары белергә тейеш төшөнсәләр:

- теҙмә ҡушма, эйәртеүле ҡушма, теркәүесеҙ ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә, баш һәм эйәрсән һөйләм; эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре;
- теҙмә ҡушма, эйәртеүле ҡушма, теркәүесеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре;
- доклад, тезис, конспект, ғариза тураһында төшөнсәләр.

8-се кластың аҙағына уҡыусылар түбәндәге күнекмәләрҙе үҙләштереп өлгөрөргә тейеш:

- ҡушма һөйләмдәргә телдән һәм яҙып синтаксик, пунктацион тикшеренеү үткәрә белеү;
- үтелгән синтаксик төҙөлмәләрҙе телмәрҙең йөкмәткеһенә һәм стиленә ярашлы ҡуллана белеү;
- 8-се класта үтелгән пунктограммаларҙы таный, таба белеү һәм тыныш билдәләренең ҡуйылышына аңлатма биреү;
- Айырымланған эйәрсән киҫәкле, хәл әйтәмле, тура һәм ситләтелгән телмәрле ябай һөйләмдәрҙә, шулай уҡ теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белеү;
- йәшәгән урынды, архитектура, тарих һәм сәнғәт ҡомартҡыларын тасуирлауға нигеҙләнгән инша яҙа белеү;
- сағыштырыу юлы менән ике йәки бер нисә персонажға һәм әҙәби персонаждар төркөмөнә характеристика яҙыу;
- протокол төҙөә белеү;
- изложениеларҙы һәм иншаларҙы темаһына, төп фекеренә стиленә ярашлы камиллаштыра, уларҙа орфографик, пунктацион, грамматик һәм телмәр хаталарын төҙәтә белеү.

Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау (4 сәғәт)

Ҡушма һөйләм

Ҡушма һөйләм буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау (2 сәғәт)

Теҙмә ҡушма һөйләмдәр (8 сәғәт)

I. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре. Теркәүесеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре.

II. Теркәүесле һәм теркәүесеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен үҫтереү; ул төр ҡушма һөйләмдәргә синтаксик төпсөү яһай белеү.

Предмет эсендәге бәйләнеш. Башҡорт теле, 5-се класс. Синтаксис һәм пунктуация. Ике баш киҫәге лә булған ябай һөйләмдәрҙән торған теркәүесле ҡушма һөйләмдәр. Ур төр ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
Предмет-ара бәйләнеш. Рус теле, 5-се класс. Синтаксис һәм пунктуация. Теркәүесле ҡушма һөйләмдәр, уларҙа тыныш билдәләре.

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр (18 сәғәт)

I. Баш һәм эйәрсән һйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйленеп килеү ысулдары: теркәүестәр, бәйләүестәр, килеш ялғауҙары, интонация, мөнәсәбәт һүҙҙәр.
Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре тураһында дөйөм төшөнсә, улар эргәһендә тыныш билдәләре: эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы эйәрсән һөйләмдәр. Хәл һөйләмдәр: ваҡыт, урын, рәүеш, күләм-дәрәжә, сәбәп, маҡсат, шарт һәм кире эйәрсән һөйләмдәр. Хәл эйәрсән һөйләмдәренең хәл әйтемдәренән айырмаһы.

II. Һөйләм киҫәктәрен, айырымланған эйәрсән киҫәктәрҙе, хәл әйтемдәрен, эйәрсән һөйләмдәрҙе, теркәүесһеҙ һәм теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы телмәрҙә стилистик маҡсатта ҡулланыу күнекмәләре. Ҡушма һөйләмдәргә телдән һәм яҙып синтаксик һәм пунктацион төпсөү күнекмәһен үҫтереү.

Предмет эсендәге бәйләнеш. Башҡорт теле, 7-се класс. Айырымланған киҫәкле һөйләмдәр. Айырымланыу тураһында төшөнсә. Айырымланған киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

Предмет-ара бәйләнеш. Рус теле, 7-се класс. Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәр. Сифаттан, сифат ҡылымдан килгән аныҡлаусыларҙың айырымланыуы. Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

Ҡушма һөйләм бүлеге буйынса үтелгәндәрҙе йомғаҡлау һәм тәртипкә һалыу.

Ҡатмарлы һөйләм төҙөлмәләре (7 сәғәт)

I. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Теҙем тураһында дөйөм төшөнсә. Уларҙың стилистик роле.

II. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәһе; шул уҡ тип һөйләмдәрҙе һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәһен үҫтереү.

Предмет-ара бәйләнеш. Рус теле, 8-се класс. Бер нисә эйәрсән һөйләмле эйәртеүле һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеү ысулдары; бер баш һөйләмгә төрлө юл менән бәйләнгән бер нисә эйәрсән һөйләм.

Синтаксис һәм пунктуация буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау (6 сәғәт)

5-8-се кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау (3 сәғәт)

V. Тематик планлаштырыу

№	Дәрестең темаһы	Сәғәттәр һаны	Уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре	Үткәреү ваҡыты		Иҫкәрмә	Өй эше
				Планлаштыр-ған	Фактик		
	I сирек						
1.	Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау	2	телмәр үҫтереү; тасуири уҡыу, һүҙ байлығын арттырыу өҫтөндә эш; синоним, антоним, омоним һүҙлектәр менән эшләү, тәржемәләү; һөйләмдәргә синтаксик анализ; диктантҡа әҙерлек	06.09 – 11.09		Телде насар белгән уҡыусылар ҙы иҫәпкә алыу	8-се күнегеү, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатырға. Текст буйынса фекер яҙырға. 13-сө күнегеү, тиң киҫәктәрҙе билдәләргә.
2.	Лексика бүлеген ҡабатлау	1	телмәр үҫтереү; тасуири уҡыу, һүҙ байлығын арттырыу өҫтөндә эш; синоним, антоним, омоним һүҙлектәр менән эшләү, тәржемәләү; һөйләмдәргә синтаксик анализ; диктантҡа әҙерлек	13.09-15.09			19-сы күнегеү. Тексҡа исем бирергә.Күренекле шәхестәр тураһында мәғлүмәт әҙерләргә.
3.	Фразеология	1	Фразеологик һүҙлектәр менән эш, һүҙ байлығы өҫтөндә эш.	16.09-18.09			Фразеологик берәмектәр менән һөйләмдәр яҙырға. Фразеологик берәмектәрҙе кәүҙәләндергән һүрәттәр төшөрөү

4.	**Контроль диктант “Яугир һәм ат”.**	**1**	һүзлек эше	20.09-22.09			Ҡағыҙәләрҙе ҡабатларға.
5.	Ҡушма һөйләм тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау	2	тасуири уҡыу, һүзлек эше, текстарҙы уҡып, план төҙөү (цитаталы план төҙөргә мөмкин), тасуири һөйләү; ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙе билдәләү, интонация буйынса һөйләм төрҙәрен ҡабатлау; синтаксик анализ	23.09-29.09		айырым уҡыусыларға индивидуаль эштәр әҙерләргә	14-се биттәге ҡағыҙәне ҡабатларға. Гәзит-журналдарҙан 3-әр ҡушма һөйләм яҙыу 25-се күнегеү. Мәкәлдәрҙе дауам итеп, ҡушма һөйләмдәр төҙөп яҙырға. 24-се күнегеү. Бирелгән миҫалдар буйынса һығымта яҙырға.
6.	Ҡушма һөйләм тураһында дөйөм төшөнсә	1	теҙмә һәм эйәртеүле һүҙбәйләнеш-тәр, теҙмә ҡушма һөйләм, эйәртеүле ҡушма һөйләм терминдарын ятлау; күнегеү менән нығытыу (төркөмләп эшләү)	30.09-02.10			19-сы биттәге ҡағыҙәне ҡабатларға.29-сы күнегеү. Текстың төп идеяһын яҙырға.
7.	Теҙмә ҡушма һөйләм	1	башҡорт халыҡ йырҙары өлгөһөндә теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе өйрәнеү, һүзлек эше, халыҡ йырҙары тураһында әңгәмә ойоштороу; мультимедиа презентация ҡулланыу	04.10-06.10			21-22-се биттәге ҡағыҙәләр.41-се күнегеү. Схемаларын төҙөргә.
8.	Теркәүесеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр	1	Башҡортостанда йәшәгән ҡоштар донъяһын байҡау, әңгәмә ойоштороу, «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгән ҡоштар; т.т.ҡ.һ. интонация төрҙәрен билдәләү, миҫалдар менән иҫбатлау	07.10-09.10			24-26-сы биттәге ҡағыҙәләр. 47-се күнегеү.
9.	Теркәүесеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре	2	Бәйләнешле текст өҫтөндә эш: фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәһен, ҡушма һөйләмдәрҙә	11.10-16.10		Республика көнөнә, суверените	30-31-се биттәге ҡағыҙәләр.53-сө

			тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатыу; дәреслектәге күнегеүҙәрҙе эшләү, контроль һорауҙарға яуап			тҡа арналған текст алырға, әңгәмә ойоштороро ға мөмкин	күнегеү. Кроссворд буйынса эшләргә. 59-сы күнегеү. Һөйләмдәр яҙырға.
10.	Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм	1	Йыйыу, бүлеү, ҡаршы ҡуйыу, һығымта яһаусы теркәүестәр, теркәүес һүҙҙәрҙе өйрәнеү, уларҙы һөйләмдәрҙә билдәләү, үҙ аллы эш	18.10-20.10			37-се биттәге ҡағыҙә.62-се күнегеү.
11.	Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре	2	Алдан әҙерләнгән текст өҫтөндә эш: тасуири уҡыу, һүҙлек эше, теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе табыу, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатыу, синтаксик анализ яһау;	21.10-27.10			39-40-сы биттәге ҡағыҙә.67-се күнегеү. 70-се күнегеү.
12.	**Изложение. “Батырҙың бала сағы»**	**1**	Ҡыҫҡартылған изложение яҙыу, һүҙлек эше Һорауҙар ярҙамында үтелгәнде ҡабатлау (һорауҙарҙы экранға ҡуйырға); текст өҫтөндә эш:	28.10-30.10			Ҡағыҙәләрҙе ҡабатларға.
13	Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре	**1**	контроль эш (пунктацион анализ үткәреү)	08.11-10.11			Берәй тарихи шәхес тураһында т.т.к. һөйләмдәр ҡулланып яҙырға.
14.	Теркәүесле һәм теркәүесheҙ ҡушма һөйләмдәрҙе ҡабатлау. Йомғаҡлау.	2	Күнегеүҙәр эшләү.	11.11-17.11		Тыуған ил төшөнсәһе тураһында фекер алышырға.	78-се, 79-сы күнегеү. Шиғырҙарҙың төп мәғәнәһен билдәләргә.
15.	Эйәртеүле ҡушма һөйләм. Баш һәм эйәрсән һөйләм	1	Һорауҙар ярҙамында үтелгәнде ҡабатлау (һорауҙарҙы экранға ҡуйырға); текст өҫтөндә эш: ҡушма һөйләмдәрҙе табыу, баш һәм эйәрсән һөйләмдәрҙе билдәләү.	18.11-20.11			50-се биттәге ҡағыҙә.84-се күнегеү.Бирелгән эштәрҙе башҡарырға.

16.	Эйәрсән һөйләм төрҙәре тураһында дөйөм төшөнсә. Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү саралары. Тыныш билдәләре	2	телмәр үҫтереү: «Башҡорт халҡы-шәжәрәле халыҡ» темаһына әңгәмә, кем ҡайһы ырыуҙан, шәжәрәңде беләһеңме? Теманы экранда күрһәтеп өйрәнеү, төркөмләп йәки икешәрләп эш төрөн биреү, дәреслек менән эш.	22.11-27.11			55-се биттәге ҡағиҙә. 93-сө күнегеү. 99-сы күнегеү. Үтелгәндәрҙе ҡабатларға. 107-се күнегеү.
17.	Дәрес-экскурсия	1	Гимназия-интернаттың китапханаһына сәйәхәт	29.11-01.12		Китап тураһында әңгәмә.	101-се күнегеү. Сәйәхәт буйынса инша яҙырға. Билдәле Сығарылыш уҡыусылары буйынса мәғлүмәт табырға
18.	Эйәрсән һөйләм төрҙәре. Эйә һөйләм	1	Шәхес тураһында әңгәмә ойоштороу, мәҡәлдәр табыу, улар ярҙамында теманы асыҡлау; күнегеүҙәр менән нығытыу.	02.12-04.12			77-се биттәге ҡағиҙә.109-сы күнегеү. Эйә һөйләмдең схемаһын һыҙырға.
19.	Эйәрсән хәбәр һөйләм	1	Башҡорт халыҡ мәҡәлдәрен ҡулланып теманы асыу, ҡағиҙәне һәм тыныш билдәләренең ҡуйылышын бергәләп өйрәнеү, ятлау.	06.12-08.12			84-се биттәге ҡағиҙә. 118-се күнегеү. Схема төҙөргә
20.	Аныҡлаусы һөйләм	1	Теманы туғанлыҡ менән бәйләү, дәреслектә бирелгән әҙәр буйынса әңгәмә, текст өҫтөндә эш.	09.12-11.12			88-90-сы биттәге ҡағиҙә. 126-сы күнегеү. Синтаксик анализ
21.	Тултырыусы һөйләм	1	Дуҫлыҡ темаһына ярашлы телмәр үҫтереү, яңы теманы асыҡлау, карточкалар менән индивидуаль эш; хикәйәләү, тасуирлау, фекер	13.12-15.12		Мәҡәлдәр әҙерләргә.	93-95-се биттәге ҡағиҙәне ҡабатларға.129-сы күнегеү.

			йөрөтөү алымдарын ҡуллнып инша яҙыу.				
22.	Эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы эйәрсән һөйләмдәрҙе ҡабатлау	1	Халҡыбыҙҙың милли аҙыҡтарының файҙаһы тураһында һөйләшеү; дәреслек менән эш, үҙ аллы эш	16.12-18.12			Өс төр һөйләм ҡулланып, дәрес темаһына ярашлы рәүештә текст төҙөргә.
23.	Хәл һөйләмдәр. Ваҡыт һөйләм	1	3. Биишеваның “Һөнәрсе менән Өйрәнсек”хикәйәһенә таянып, тормош, ғүмер тураһында фекер йөрөтөү; ваҡыт һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү сараларын асыҡлау, миҫалдар менән нығытыу.	20.12-22.12			99-100-сө биттәге ҡағиҙә. 137-се күнегеү. 139-сы күнегеүҙәге һорауҙарға телдән яуап әҙерләргә.
24.	Урын һөйләм	1	синтаксик һәм пунктацион анализ яһау; теманы өйрәнеү, миҫалдар һәм күнегеүҙәр менән нығытыу; карточкалар менән индивидуаль эш.	23.12-25.12			103-сө биттәге ҡағиҙә. Иҫкәрмәне ятларға.145-се күнегеү.
25.	Сәбәп һөйләм.	1	Өфө ҡалаһы тураһында әңгәмә ҡороу; фразеологик берәмектәрҙе ҡулланып, сәбәп һөйләмдәрҙең асылын аңлатыу, эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр төҙөү; сәбәп һөйләмдәрҙе барлау, таҡтала эш, төркөмләп эшләү.	27.12-29.12			106-108-се биттәге ҡағиҙәләр. 151-се күнегеү. Сәбәп һөйләмдәргә һөйләмдәр уйлап яҙыу
26.	**ТҮ. «Дуҫ кеше ниндәй була?»**	**1**	**Инша яҙыу. Эйәрсән хәл һөйләмдәрҙе ҡулланырға.**	30.12			110-111-се биттәге ҡағиҙә. 156-сы күнегеү.
27.	Маҡсат һөйләм	1	Теманы башҡорт мәҡәлдәренә таянып аңлатырға.	17.01-19.01			Ижади эште тамамларға.
28.	Рәүеш һөйләм	**1**	3. Биишеваның әҫәрен ҡулланып, атай-әсәй, туғандар, рух нығлығы тураһында әңгәмә ҡороу; рәүеш һөйләмдәрҙең мәғәнәһен,	20.01-22.01		Мәҡәл, әйтем әҙерләргә.	114-се биттәге ҡағиҙә. 162-се күнегеү.

			hорауҙарын асыҡлау, дәреслек менән эш, тест hорауҙарына яуап (проектор), инша				
29.	Күләм – дәрәжә һөйләм.	2	Телмәр үҫтереү; хаттарҙың яҙылыу үҙенсәлеген билдәләү, күләм-дәрәжә һөйләмдәрҙең асылын бергәләп аңлау, миҫалдар менән нығытыу, һөйләмдәр төҙөү.	24.01-29.01			117-се биттәге ҡағыҙә. 167-се күнегеү. 169-сы күнегеү.
30.	Сағыштырыу һөйләм	1	Башҡорт аттары тураһында әңгәмә ойоштороу, һүҙлек эше; халыҡ йырҙарын ҡулланып, сағыштырыу һөйләмдәрҙең мәғәнәһен асыҡлау, тыныш билдәләренең ҡуйылышын өйрәнеү; һүҙлек диктанты	31.01-02.02			120-122-се биттәрҙәге ҡағыҙә. 175-се күнегеү.
31.	Шарт һөйләм.	1	Йәшәү маҡсаты тураһында әңгәмә ойоштороу. Шарт һөйләмдәр тураһында аңлатма биреү.	03.02-05.02			126-сы биттәге ҡағыҙә.179-сы күнегеү. Бирелгән эштәрҙе башҡарырға. 183-сө күнегеү.
32.	Кире һөйләм.	1	М. Бураҡаеваның хикәйәһенә таянып “Нимә ул бәхет?” тигән темаға әңгәмә үткәрергә. Кире һөйләмдәр ҡулланып текст төҙөргә.	07.02-09.02			129-130-сы биттәге ҡағыҙә. 188-се күнегеү.
33.	Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе ҡабатлау.	1	Дәреслек менән эш, күнегеүҙәр, төрлө эш төрҙәре менән теманы нығытыу, контроль hорауҙарға яуап биреү; контроль эшкә әҙерлек.	10.02-12.02		Контроль эшкә әҙерләнергә.	194-се күнегеү. 199-сы күнегеү.
34.	**Контроль диктант. ”Дауылда”**	**1**	Һүҙлек эше	14.02-16.02			Ҡағыҙәләрҙе ҡабатларға.
35.	Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр	2	Яңы теманы үҙләштереү, схемалар менән өйрәнеү, синтаксис яһау өлгөһөн бергәләп эшләү, төркөмләп эшләү.	17.02-23.02			138-139-сы биттәге ҡағыҙәләрҙе ҡабатларға. 205-се күнегеү. 208-се күнегеү.

36.	Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре	1	Ғайса Хөсәйенов әҫәренән өҙөктө өйрәнеү, күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙе табыу, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатыу.	24.02-26.02			214-се күнегеү.
37.	Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр	1	Дәреслектә бирелгән текст ярҙамында һөйләү телмәрен үҫтереү, яңы теманы үҙләштереү, күнегеүҙәр ярҙамында нығытыу, синтаксик анализ яһау өлгөһөн күрһәтеү.	28.02-02.03			144-се биттәге ҡағиҙә.219-сы күнегеү.
38.	Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре	2	Дәреслектә бирелгән текстар өҫтөндә эш: тасуири уҡыу, план төҙөү, һүҙлек эше, һөйләү, ҡушма һөйләмдәрҙе табыу, тулы анализ яһау; нығынған һүҙбәйләнештәрҙе иҫкә төшөрөү, һөйләмдәр төҙөү, яҙма эш	03.03-09.03			147-се биттәге ҡағиҙә. 228-се күнегеү. 227-се күнегеү.
39.	Теҙемдәр	1	Проектор аша теҙемдәрҙе күрһәтеү, интонация менән уҡыу күнекмәләре, ҡобайырҙарҙан бирелгән өҙөктәр өҫтөндә эш.	10.03-12.03		Башҡорт халыҡ ижады менән бәйләргә.	Ҡобайырҙан теҙемдәр яҙырға.
40.	“Ҡушма һөйләм” темаһын ҡабатлау	2	Дәреслектә бирелгән йөкмәткеле күнегеүҙәр өҫтөндә эш: тасуири уҡыу, һүҙлек эше, халҡыбыҙ тарихына күҙ һалыу, ҡушма һөйләмдәр менән эш итеү.	14.03-19.03		Яҙма эшкә әҙерлек үткәрергә.	234-се күнегеү. Һорауҙарға яуап яҙырға.
41.	**Изложение. «Сыңрау торна»**	**2**	Һүҙлек эше, план төҙөү, һөйләү.	21.03-26.03			Ҡағиҙәләрҙе ҡабатларға.
42.	Тыныш билдәләренең ҡуйылышын ҡабатлау. Һөйләм аҙаҡтарында тыныш билдәләре	1	Нөктә, өндәү, һорау, күп нөктәнең ҡуйылышын иҫкә төшөрөү, миҫалдар менән нығытыу; нәфис әҙәбиәттән миҫалдар килтереү, уларҙы тасуири уҡыу.	04.04-06.04			Таблица буйынса миҫалдар яҙырға.

43.	Өтөр ҡуйылыу осраҡтары	3	Яңы теманы үҙләштереүҙә матбуғат миҫалдарын ҡулланыу, таҡтала эш; текст буйынса цитаталы план төҙөү, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатыу.	07.04-16.04		Кешелек сифаттары буйынса әңгәмә үткәреү.	Таблица буйынса эшләргә.252-се күнегеү. 256-сы күнегеү. 257-се күнегеү.
44.	Нөктәле өтөр ҡуйылыу осраҡтары	1	Бала саҡ тураһында һөйләшеү, Ф. Рәхимғолова әҫәренән өҙөк уҡыу, тасуири һөйләү, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатыу.	18.04-20.04			173-сө биттәге һорауҙарға яуаптар яҙыу.
45.	Һыҙыҡ ҡуйылыу осраҡтары	1	Текст өҫтөндә эш: тасуири уҡыу, һүҙлек эше, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатыу, күнегеүҙәрҙе күсереп алыу.	21.04-23.04		Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр әҙерләргә.	264-се күнегеү. Ҡағыҙә.
46.	Ике нөктә ҡуйылыу осраҡтары	1	Р. Ғамзатовтың тексты өҫтөндә эш: тасуири уҡыу, һөйләү, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатыу, ҡушма һөйләмдәргә синтаксик анлиз яһау.	25.04-27.04			266-сы күнегеү.
47.	Тыныш билдәләренең ҡуйылышын нығытыу	1	Төрлө типтағы күнегеүҙәр эшләү, пунктацион ҡағыҙәләрҙе ятлау, төркөмләп эшләү, баһа ҡуйыу.	28.04-30.04		Яҙма эшкә әҙерләнергә.	Һәр тыныш билдәһенә бирәр һөйләм яҙырға.
48.	**Диктант, грамматик эш менән «Ҡорот»**	**1**	Диктант яҙыу, пунктуация буйынса грамматик эш.	04.05-07.05			Ҡағыҙәләрҙе ҡабатларға.
49.	5-8-се кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау	3	Үҙ аллы, ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен ҡабатлау, тамыр һәм ялғау, ҡушма һүҙҙәр, тыныш билдәләренең ҡуйылышы, синтаксик анализ яһау һ.б.	10.05-18.05			275-се, 278-се, 283-сө күнегеүҙәр. Иншаға әҙерләнергә.
50.	**Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Инша**	**1**	Теманы Бөйөк Еңеүгә арнап һайларға	19.05-21.05			Ижади эште тамамларға.
51.	Бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау. **Тест үткәреү**	1	Ҡабатлау, тест эшләү, баһалау.	23.05-25.05			Ҡағыҙәләрҙе ҡабатларға.

52.	**Изложение «Сәптәр»**	**1**	Һүҙлек эше. Хаталар өҫтөндә эш	26.05-28.05			Ҡағыҙҙарҙе ҡабатларға
53.	Сирекке һәм йыллыҡҡа баһалар ҡуйыу	1	Йәйге каникулда нимә уҡырға?	30.05-31.05			Китаптар исемлеген әҙерләргә
54	Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.	1	Ҡабаталау				Ҡағыҙҙарҙе ҡабатларға
55	Йомғаҡлау	1	Йәйгелеккә эш				Өҫтәлмә материал әҙерләргә.
	Бөтәһе:	**68**					

VI. Кабинеттағы техник саралар

1. Телевизор
2. Мультимедия компьютеры
3. Сканер
4. Лазерлы принтер
5. Күсермә аппарат
6. Аудиоцентр
7.

VII. Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Төп дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандарттары. – М: Просвещение, 2011
2. Төп дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандарттарының фундаменталь нигеҙе. – М: Просвещение, 2011
3. Ғәбитова З.М. Төп дөйөм белем биреү буйынса өлгө программалар. Башҡорт теле 5-9 класс. – Өфө: Китап, 2012
4. Юлмөхәмәтов М.Б. Төп дөйөм белем биреү буйынса өлгө программалар. Башҡорт әҙәбиәте. – Өфө: Китап, 2011
5. Аҙнағолов Р.Ғ. Мәктәптә башҡорт телен уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2011
6. Иҙелбаев М.Х. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. – Өфө, 2011
7. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. – Өфө: БДУ, 2013
8. Башҡорт теле. Ҡушма һөйләм сминтаксисы: уҡытыу туған (башҡорт) телдәалып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы/(Л.Х. Сәмситова, С.А. Таһимрова, Э.Ф. Рәхимова, Т.М. Исламова).-Өфө: Китап, 2017.